*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Ил-йорт тәме уның йәнендә



Тыуған ер, тыуған тупраҡ, унда ғүмер иткән ҡәрҙәштәр бик тә күңелгә яҡын, бик тә ҡәҙерле. Ҡараштары балҡып, йөрәге талпынып торған Зөһрә Мансур ҡыҙы Зиннәтова өсөн дә шулай. Йәнтөйәге — Асҡын районының Солтанбәк ауылы — йән биргән ер, дәрт-дарман, илһам биргән ер. Әҙәм балаһы ошо ҡөҙрәт менән оло юлға сыға. Ил күрергә, донъяны танып белергә, аң-зиһен үстерергә...

Зөһрә лә ил-донъя күрергә ашҡына, кешеләр менән аралашырға алҡына. Ҡариҙел районының Муллаҡай ауылы мәҙәниәт йортонда эшләп, Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-мәғрифәт училищеһында уҡып йөрөгән еренән комсомол путевкаһы менән «Стахановсы» отрядына ҡушылып, Томск ҡалаһына гидроэлектростанцияны үҙгәртеп ҡороу төҙөлөшөнә китә. Ауыр эштән ҡурҡып тормай, штукатур-буяусы һөнәрен үҙләштерә. Мәгәр үҙенең йәненә хуш рухиәт өлкәһенән һис тә айырылмай, төрлө мәҙәни сараларҙа үткәреүҙә әүҙем ҡатнаша, Томск мәҙәниәт-мәғрифәт училищеһын тамамлай.

Себерҙә ғүмер иткән ҡәрҙәштәребеҙ йәне-тәне менән милли рух «һутына» сарсап йәшәй. Зөһрә быны бар булмышы менән аңлай һәм 1989 йылда йәмәғәт башланғысында «Дуҫлыҡ» ансамбле ойоштора. Ансамбль үҙенең концерт программалары менән Томск өлкәһенең бөтә төбәктәрендә була, йәнә Кемерово, Новосибирск өлкәләрендә, Алтай крайында, Барнаул, Северск, Юрга ҡалаларында сығыш яһай. Был сығыштар һүнеберәк ятҡан милли рух ҡуҙын баҙлатып ебәрә, ҡәрҙәштәребеҙгә милләт булараҡ барлыҡтарын, буласаҡтарын тойҙорта.

Йәшәгәс, янып, башҡаларҙы ла ҡуҙғатып, асылыбыҙға ҡайтарыр, ҡот-ырыҫ килтерер эштәргә әйҙәп йәшәү зарур. Зөһрә тап шундай балҡып торған, милләттәштәренең дә тормошон, йәшәйешен балҡытҡан зиннәтле һәм нурлы зат. Был уның яҡты аң-зиһенендә, алсаҡ ҡарашында, милли үҙенсәлектәр, тел, мәҙәниәт даирәһен байҡауында, осҡорлоғонда, зирәклегендә, ихтыяр көсөндә, илаһи ҡөҙрәт менән эшләүендә күренә. Зөһрә айырыуса халыҡ ижадын халыҡҡа еткереп,



05.2002 Part 1.p65 46 06.06.02, 17:11

нәфис ижадты үҫтереп, милли үҙанды уятыуға күп көс һала. Тамашаларҙы, концерттарҙы үҙе ҡуя, үҙе сәхнәлә уйнай, йырлай, бейей.

Көндәлек эш, тырышлыҡ, ижади ынтылыш һөҙөмтәһендә Башҡортостандан, Татарстандан килгән ҡәрҙәштәрҙән тороҡло коллектив туплана. Зөһрә иһә көндән-көн киңерәк танылыу ала барған ансамблдең йөрәгенә әйләнә һәм тағы ла күләмлерәк эшмәкәрлеккә көс-кеүәт бирә. Ансамблдең сығыштарын тамашасылар йылы ҡабул итеүен, халыҡтың ихтирамын яулауын күреп, уға урындағы етәкселек тә иғтибар итә. Губернаторҙар, мэрҙар рәхмәт хаттары тапшыра, хөрмәт грамоталары, иҫтәлекле бүләктәр менән билдәләй. 1993 йылда иһә коллектив Томскиҙағы «Лидер» халыҡ ижады һарайына ҡабул ителә.

Ансамбль менән генә оҙаҡ йылдар тупланған милли мәсьәләләрҙе хәл итеп булмай. Шуға ла «Дуҫлыҡ» мәҙәниәт үҙәге ойошторола һәм ул Томск өлкәһе хакимиәте юстиция идаралығында рәсми рәүештә теркәлә. Зөһрә өсөн милләттәштәр менән эшләү даирәһе тағы ла киңәйә. Инде башҡорт мәҙәни үҙәге етәксеһе булараҡ, ул «Авангард» халыҡ ижады һарайының милли бүлегендә башҡорт милли мәҙәниәтен, йолаларын, телен тергеҙеүгә әүҙем тотона. Бер үк ваҡытта «Дуҫлыҡ» башҡорт-татар ансамбле менән дә етәкселек итә, эште тағы ла йәнләндереп, балалар һәм ололар фольклор, йәнә «Азамат», «Йондоҙ» вокаль-инструменталь ансамблдәре, «Ағиҙел» әҙәби клубы, драма түңәрәге төҙөй һәм уның режиссеры була. Үҙе эскиздар, декорациялар яһай, сәхнәгә ҡуйылған әҫәрҙәрҙе музыкаль яҡтан биҙәй, һәүәҫкәр актерҙарға грим һала.

Тамаша һәм, ғөмүмән, театр сәнғәте буйынса тағы ла киңерәк белемгә эйә булыу өсөн Зөһрә мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәренең оҫталығын камиллаштырыу курстарында шөғөлләнергә лә өлгөрә. Фольклор коллективтары менән эш, фольклор байрамдары тамашаларын ҡуйыу, байрамдарҙы ойоштороуҙа фольклор-уйын традициялары мөмкинлектәрен, сараларын, методикаһын ныҡлыраҡ төшөнә һәм эшендә ҡуллана. Ансамблдең һәүәҫкәр артистары «Татар йыры — 96» (Ҡазан) халыҡ-ара фестивалендә тамашасылар һөйөүе призын яулай, башҡорт йыры «Уралым — 97» (Өфө) фестивалендә ҡатнаша.

Ҡәрҙәштәрҙең милли үҙаңын уятыу һәм үҫтереү, уларҙы башҡорт донъяһына ылыҡтырыу күп яҡлы ла, сетерекле лә, оҙайлы ла эш. Ул ғәйәт ҙур көс-ҡеүәт, ныҡышмалылыҡ, түҙемлелек, ижади ҡомар ҙа талап итә. Зөһрә быны яҡшы аңлай һәм ҡәрҙәштәргә төрлө алымдар менән йоғонто яһарға тырыша. Томск өлкәһе башҡорттарының беренсе ҡоролтайы алдынан Өфө дәүләт сәнғәт институтының башҡорт музыкаһы бүлеге талиптарын саҡыра. Улар Томск өлкәһе ҡасабаларында, ауылдарында концерттар ҡуя,башҡорт йыр-моңдары, музыка ҡоралдары менән ҡәрҙәштәребеҙҙең күңелен елкендерә. Милләттәштәр туған тел бәҫен дә һаҡлаһындар, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарын да белһендәр! Шул маҡ-



*Зөһрә Зиннәтова, Әнисә Жеравина (һулдан) яҡташтары һәм туғандары менән*



05.2002 Part 1.p65 47 06.06.02, 17:12

сатта «Һаумыһығыҙ, күршеләр!» тигән радиотапшырыу ойошторола һәм Башҡортостан телерадиокомпанияһы менән бәйләнештә алмаш тапшырыуҙар алып барыла. Район, өлкә гәзиттәренә, телевидениеһына башҡорт донъяһын сағылдырған белешмәләр, хәбәрнамәләр, мәҡәләләр, «Башҡортостан» энциклопедияһына Томск өлкәһенең арҙаҡлы башҡорттары тураһында мәғлүмәттәр әҙерләп бирелә.

Йыйын үткәреп, яҡындан танышыу, аралашыу, кәңәшләшеү, уй-фекер төйнәү, артабанғы үҫеш һәм һынылыш юлдарын асыҡлау мәсьәләһе килеп тыуа. Шулай итеп, 1998 йылда Томск өлкәһе башҡорттарының беренсе ҡоролтайы үткәрелә. Унда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты вәкилдәре лә ҡатнаша. Мәртәбәле йыйында Зөһрә Зиннәтова һәм уның рухташтары әҙерләгән «Томск өлкәһе башҡорттарының мәҙәниәтен, телен, йолаларын тергеҙеү һәм үҫтереү» программаһы ҡабул ителә. 2003 йылға тиклем ғәмәлгә ашырыу көс уңында тотолған ошо программа өлкә хакимиәтенә тәҡдим ителә һәм ул Башҡортостан менән Томск өлкәһенең хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеүҙең нигеҙен тәшкил итә. Милләтем тип арымай-талмай хеҙмәт иткән Зиннәтова Зөһрә Мансур ҡыҙы Томск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының рәйесе итеп һайлана.

Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡып йөрөгән Зөһрә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Ул иһә кәрәкле әҙәбиәт, милли музыка ҡоралдары алышырға булыша. Зөһрә Башҡортостан хөкүмәте етәкселәре, мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат әһелдәре менән осраша, көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итә. Зөһрәнең булдыҡлылығын, эшлеклелеген күреп, уны өлкә хакимиәтендәге Милли үҙәктәр (18 милли үҙәк) ассоциацияһының вице-президенты, бер йылдан һуң ҡала мэрияһының Координация советы ағзаһы итеп һайлайҙар, Алтай крайы, Кемерово, Новосибирск, Омск, Томск өлкәләре буйынса Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп билдәләйҙәр. Уның башланғысы менән Барнаулда (Барын ауылы) «Ирәндек» башҡорт мәҙәни үҙәге барлыҡҡа килә.

Зөһрә үҙенең илаһи ҡөҙрәте менән милли үҙаңды уятыу, рухты балҡытыу өсөн ҡәрҙәштәрендә гәм, сәм тыуҙыра. Ә гәме барҙың йәме бар. Ҡала, өлкә кимәлендә үткәрелгән «Науруз», «Ғәйет», «Һабантуй» кеүек йола байрамдары һәм дини байрамдар, Флорид Бүләковтың «Әбейҙәргә ни етмәй» пьесаһын күрһәтеү милләттәштәрҙең тормошона йәм өҫтәй. Был спектаклдең премьераһы 2000 йылдың 5 мартында «Авангард» халыҡ ижады һарайында ҡуйыла. Зөһрәнең режиссер булараҡ эше телерадиотапшырыуҙарҙа, спектакль тураһындағы рецензияларҙа, мәҡәләләрҙә, тамашасыларҙың баһаларында билдәләнә. Үҙешмәкәр театр коллективтарының ун бер коллектив ҡатнашҡан «Театр яҙы — 2000» өлкә фестивалендә лә спектакль театр эшмәкәрҙәре союзы тарафынан юғары баһалана. Зөһрә сәхнәләштергән был спектакль өлкәнең театр тормошонда оло ваҡиға тип ҡабул ителә, сөнки 1920 йылдан бирле милли тамаша ҡуйылмаған була. Рухи донъяны йәнләндереп һәм йәмләндереп, халыҡ ынйыларын халыҡҡа еткереп, Зөһрә ҡәрҙәштәренең оло ихтирамын яулай.

Эшләгән эшең башҡаларға файҙа килтерһә, фәһем бирһә, йәшәү ҙә йәмлерәк һәм күркәмерәк. Ошо хаҡта уйланып, Зөһрә Томск башҡорт мәҙәни үҙәгенең эше, милләттәштәребеҙ тураһында «Башҡортостан минең йәнемдә» тигән уй-кисерештәрен яҙа. Ил, халыҡ гәме менән һуғарылған Зөһрә Мансур ҡыҙы хәҙер Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында мәҙәниәт мәсьәләләре буйынса баш белгес вазифаһын башҡара, милләтебеҙ хәстәрлектәре менән янып йәшәй. Алда иһә — өмөтлө тормош, милли үҫеш даирәһе...



05.2002 Part 1.p65 48 06.06.02, 17:12